**5-се класс**

**КӨҘ КИЛДЕ.**

Йәмле йәй үтеп китте. Тәбиғәттә көҙ билдәләре күберәк күренә башланы. **Болондар ҙа, яландар ҙа үҙҙәренең йәм- йәшел төҫтәрен юғалттылар.** Бөтөнләй буш ҡалған иген баҫыуҙары ла көҙ башланыуы тураһында хәбәр итә.

Ағастарҙа һары япраҡтар күбәйҙе. Ҡоштар һайрауҙан туҡтаны. Ҡара ҡарлуғастар һәм торналар йылы яҡтарға осоп киттеләр. Йәнлектәр донъяһында ла ҙур үҙгәрештәр бар. Уларҙың бөтәһенең дә балалары үҫеп етте һәм үҙ алдына көн күрә башланы.

Беҙҙе солғап алған тәбиғәт көндән-көн үҙгәрә бара. Хайуандар һәм үҫемлектәр һалҡын ҡышҡа әҙерләнәләр. Көндәр ҡыҫҡара. Һәр аҙымда ямғырлы һәм ҡыраулы көндәр яҡынайыуы һиҙелә.

**Эштәр:**

1. Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ эшләргә
2. Тиң киҫәктәрҙең аҫтына һыҙырға

## ЯҢЫ ДУҪТАР.

Нәфисә ҡышҡы каникулды ауылда үткәрҙе. Маһира менән Сабира уны өҫтө быяла кеүек булып туңған йылғаға алып төштөләр. Тирмәнгә алып барҙылар, унда бойҙайҙан нисек итеп он яһауҙы күрһәттеләр. Нәфисә ондо үҙ ҡулы менән тотоп ҡараны. Он бик йылы ине. Фермала уға яңы һауып алынған йылы һөт эсерҙеләр.

Иртәгә ҡалаға ҡайтып китәбеҙ тигән кистә Нәфисә атаһы һәм өләсәһе менән оҙаҡ һөйләшеп ултырҙы. Ул яңы иптәштәрен ҡалаға саҡырыуы, уларға ҡалала парктарҙы, музейҙарҙы күрһәтергә теләүе тураһында әйтте.

— Атай, яңы иптәштәремә трамвай күрһәтерменме? — тине.
— Уларға ҡыҙыҡ әйберҙәр табырбыҙ, ҡыҙым, саҡыр, — тине атаһы.
Яңы дуҫтары Нәфисәне оҙатырға килделәр.

**Эштәр:**

1. Текстан өндәш һүҙҙәрҙе табырға
2. ***Музейҙарҙы, фермала, уларға*** тигән һүҙҙәрҙең тамырын, ялғауҙарын билдәләргә

## ДУҪТАР.

**Борис менән Камал утрауҙа үҙҙәре генә ҡалған.** Улар нимә тураһындалыр шым ғына һөйләшә.

Был утрау бер юғала, бер һыу аҫтынан ҡалҡып сыға. Уға ситке урам малайҙары хужа. Бында улар ниндәй генә серҙәр һөйләшмәй ҙә, ниндәй генә уйындар уйнамай! Йә батыр, йә партизандар командиры, һис юғында атаман булалар. Ошонда ғына Азаматтың өс тапҡыр Чапай, бер тапҡыр Пугач булғаны бар. Ә Салауат булған саҡтың инде иҫәбе лә, һаны ла юҡ.

Малайҙар һөйләшеп туйҙылар ҙа һыу инергә тотондолар. Шунда улар төҫө ҡасҡан Азаматты күрҙеләр. Уға ни булған? *(Ә. Бикчәнтәев.)*

**Өҫтәлмә эш.**

1. **Текстан 5 яңғыҙлыҡ һәм 5 уртаҡлыҡ исемде табырға**
2. **Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ эшләргә**

## МАТУРҠАЙҘАР.

Беҙҙең өйҙә көн дә төрлө **яңылыҡтар,** үҙгәрештәр булып ҡына тора.
— Улым, ҡыҙым, уянығыҙ әле! Ҡарағыҙ, оло һарыҡ һеҙҙең икегеҙгә лә матур бәрәстәр килтергән!

Әсәйҙең ҡыуаныслы тауышына уянһаҡ, күҙҙәребеҙ ни күрһен! Ишек төбөнә түшәлгән йәшел бесән өҫтөндә оло һарыҡ үҙенең кескәй генә **бәрәстәренең** һырттарын, ҡорһаҡтарын алмаш-тилмәш ялай.

- Эй, **матурҡайҙар!** Береһе — аҡ, икенсеһе — ҡара! Һике **йөҙлөгөнә** баҫҡан ағайым талпына-талпына сәпәкәй итә.
- Ҡара **бөҙрәкәйе** һиңә булыр, **улым,** ә ағы — Зөбәржәт **туғаныңа,** — ти әсәй, **үҙе** шатланып йылмая.

**Эштәр:**

1. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәрҙең тамырын һәм ялғауҙарын билдәләргә.
2. ***Йәшел*** тигән һүҙгә фонетик анализ эшләргә

# ҠОШ ЮЛЫ.

Башҡортмон тигән кеше өс нәмәне белергә тейеш. Беренсеһе — үҙенең ырыуын, ете быуынын. Икенсеһе — халыҡ йырҙарының тарихын. Өсөнсөһө — йондоҙҙарҙы айырырға, уларҙың исемдәрен белергә тейеш.

Йондоҙҙар бик күп. Ләкин кешеләргә уларҙың өс меңдән ашыуы ғына күренә. Күктең буйынан буйына һуҙылған яҡты бер һыҙатҡа иғтибар итегеҙ. Был йондоҙҙар һыҙаты Ҡош юлы тип атала. «Ҡош юлы» тигән хикәйәт тә бар. Имеш, бер йылды торналар теҙелешеп йылы яҡҡа осҡан мәлдә ел-дауыл ҡупҡан. Бала торналар аҙаша башлаған. Шул саҡ оло торналар, ҡалғандарына юл күрһәтеү өсөн, ҡауырһындарын күк йөҙөнә сәскән, ти. **Был ҡауырһындар йондоҙға әйләнгән**. Ҡош юлы тигәндәре ана шунан ҡалған, ти.

**Эштәр:**

1. Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ эшләргә
2. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәренә миҫалдар яҙырға

## Изложение V класс

## ҠОТҠАРҘЫ

Фәрит йылға буйында ҡармаҡ һалып ултыра ине. Шул ваҡыт Гөльямал әбей һыу буйына килде лә керҙәр сайҡарға тотондо. Кер сайҡау ҡармаҡ һалыусыға бәлә инде ул. Фәриттең быға кәйефе китте. Бәләкәс Гөлнур ҙа өләсәһенә эйәргән, керҙәр сайҡарға килгән икән. Уныһы тағы ла тыныслыҡ бирмәй.

Фәрит ҡармаҡтарын йыйҙы ла китергә ҡуҙғалды. Шул арала яҡында ғына әллә нәмәнең сулп итеп һыуға төшкәне ишетелде. Күтәрелеп ҡараһа, яр ситендә генә Гөлнурҙың аҡ күлдәге ҡабарып торғанын күрҙе. Фәрит ҡаушап китте. Ләкин шул ваҡытта уҡ ҡармаҡ һаптарын ергә ырғытты ла һыуға һикерҙе. Ҡыҙҙы ике ҡулы менән күтәреп алды ла тиҙ генә ярға менде. Ул арала ҡыҙҙың өләсәһе лә йүгереп килеп етте. Ләкин өләсәһе бер ниндәй ҙә ярҙам күрһәтә алмай ине.

Фәрит бер аяғы менән ергә теҙләнде лә Гөлнурҙы күкрәге менән яткырҙы. Унан һуң бер ҡулы менән кәүҙәһен тотоп, икенсеһе менән елкәһенә йомшаҡ ҡына итеп һуҡҡыланы. Шунда ҡыҙҙың йотҡан һыуы ауыҙынан кире сыҡты. Фәрит бәләкәс ҡыҙҙы сиҙәмгә ятҡырып, яһалма һулыш алдырырға тотондо. Шунан һуң ҡыҙыҡай иркен һулыш ала башланы һәм илап та ебәрҙе.
Өләсәһе Гөлнурҙы ҡосағына алды ла иркәләй башланы. Гөлнур менән мауығып, әбей Фәриткә бер йылы һүҙ ҙә әйтә алманы. Фәрит ҡармаҡ һаптарын алды ла ҡайтып китте. Уның бөтә еренән һыу аға. Ләкин уга шундай рәхәт, шундай еңел! Баяғы борсолоуҙары бөтөнләй онотолған. Ул баланы ҡотҡарыуына шатлана, үҙ-үҙенә күңелле йылмая ине.

## АУЫР ХЕҘМӘТ

Терпенең энәләренә эләктереп үлән ташыуы хаҡында һәр кемдең ишеткәне барҙыр, һөйләгәндә был эш еңел кеүек булһа ла, эшләгәндә ул терпе өсөн бик үк еңел түгел икән.

Мин терпене урманға бәшмәк йыйырға барғанда күрҙем.
Терпе йүгергеләп үлән ташып йөрөй ине. Ул, энәләренә эләктереп, өс япраҡ алып китеп бара. Ике япраҡты ҡабырғаһына, бер япраҡты арҡаһына эләктереп алған. Был йөк бик еңел. Уны терпе хатта һиҙмәйҙер ҙә. Үләнде күп кенә итеп алып китер ине лә бит, ләкин уны энәләргә эләктереүе ҡыйын. Мин ҡыҙыҡһынып әкрен генә терпенең артынан киттем.

Терпенең өйө ҡарт шыршы төбөндәге соҡорҙа икән, ул шунда килеп туҡтаны. Хәҙер үләндәрҙе энәләренән ысҡындырып, өңгә түшәргә кәрәк. Ә уларҙы нисек итеп ысҡындырырға һуң? Аяҡ менән эләктереп булмай, ә теш менән ысҡындырыуы тураһында уйларға ла ярамай. Уны һелкетеп тә төшөрөп булмай. Бына бит ниндәй ауыр хәл! Терпе арҡаһын ағасҡа ышҡый башланы. Ҡабырғалағы япраҡтарҙы ул шулай итеп төшөрҙө, ә арҡаһындағыһын төшөрә алмай ҙа ҡуя бит. Арып бөттө, бахырың. Үлән төшмәй ҙә ҡуя.

Терпе бик оҙаҡ маташты, ләкин үләнде ыскындыра алманы. Ул бер урында баҫып торҙо ла: «Туфф! Туфф!» — тип ҡуйҙы. Был беҙҙеңсә «ох, ах» тигән һымаҡ булалыр инде. Ул тағы ла һуҡмаҡ буйлап кире китте.
Терпе күҙҙән юғалғас, мин уның өңөнә япраҡтар килтереп һалдым.
Терпегә ярҙам итмәй мөмкин түгел ине. Уның эше бик ауыр икән шул.

# ЛӘЛӘ ҮҪТЕРГӘН ҠЫЯР

Ләләгә инде һигеҙ йәш тулды. Яңы өйгә күсеп, аҙна-ун көн йәшәүгә, Ләләнең үҙенең дә йәшелсә баҡсаһы барлыҡҡа килде. Күрше ағайҙарҙың баҡсаһы янында гына ике төп көнбағыш ултыра ине. Уларҙы ҡыҙыҡай тәүге көндә үк күргәйне инде. Ул көн һайын үҙенең бәләкәй генә биҙрәләре менән көнбағыштарға һыу ҡойҙо, уйынсыҡ көрәге менән төптәрен күмде.

Бер көндө Ләлә әсәһенең ашҡа турай торған һуғандары араһынан йәшел ҡыяҡ сығарған ике баш һуғанды алып сыҡты ла көнбағыштар янына ултыртып ҡуйҙы.

Ләләнең көнбағыштары үҙенән әллә күпмегә бейек булып үҫеп китте. Кутандары ла, бер төптән әллә нисә йәшел ҡыяҡ сығарып, үргә үрләне. Тик бына ҡыярҙың ике һары сәскәһе генә әллә ни эшләп икеһе лә бер-бер артлы һулыны ла ҡуйҙы. Ҡыҙыҡай күпме генә һыу һипһә лә, яңынан күҙҙәрен асманылар.

Ләлә сүгәләп кенә ергә ултырҙы, үҙенең баҡсаһында- гы һулыған сәскәләренә моңһоу ғына ҡарап торҙо. Унан һуң ҡапыл урынынан һикереп торҙо. Уның йөҙөндә шатлыҡ нуры балҡый ине: һулыған сәскәләрҙең төбөндә бәләкәй генә ике йәшел ҡыяр үҫә башлаган.

Бер ҡояшлы иртәлә Ләлә башҡа көндәрҙәгенән иртәрәк уянды. Ул йүгерә-атлай тышҡа сығып китте һәм, күп тә үтмәй, ҡояш төҫлө балҡып, ҡулына бер башы аҡһыл, оҙонса йәшел ҡыяр тотоп, килеп тә инде.

— Был ҡыяр минең баҡсамда үҫте. Кин, әсәй, шуны ла белмәйһеңме ни! — ти, Ләлә. Ул, ай-вайға ҡуймай, әсәһен тышҡа алып сыҡты. Көнбағыштарын, һуғандарын, ҙурайып килгән икенсе ҡыярын күрһәтте. Уларҙы нисек ҡарап үҫтереүе тураһында һөйләп бирҙе.

**6 класс**

## БОРСОУЛЫ УЙҘАР.

Өй эсе ҡараңғы. Балалар йоҡлайҙар. Иң төптә Иштуған ята. Уға әле ни бары ун ике генә йәш. Ләкин инде ул ғаиләнең-өмөтө, киләсәге. Ул үҫер, атаһына иш булыр, ярҙамсы булыр. Шуға ла Байгилде ағай уға Иштуған тип исем ҡушҡан.

Байгилде ағай менән Сәғүрә еңгәйгә төн йоҡламай уйланырға, хәстәрләргә тура килә. Сөнки улар егәрле һәм тырыш булһалар ҙа, бәхетле түгелдәр. Улар байҙа көн-төн эшләнеләр, әммә тамаҡтары аслы-туҡлы, өҫтәре яланғас булды. **Әле бөгөн дә Байгилде ағай ҡомһоҙ Ҡорман байға барып ялланды.** Быны белеп, Сәғүрә еңгәй ҙә атлы-эйәрле булырбыҙ тип өмөтләнде. Ләкин ғаиләнең таянысы булған Байгилде ағайҙың бөтмәҫ-төкәнмәҫ уйланыуҙары уны хафаландыра ине. *(З. Биишева.)*

**Эштәр:**

1. Ҡушма исемдәрҙе һайлап яҙырға

2.Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ яһарға

## ВАТАНЫМ.

Ватаным минең йөрәгемдә ниндәй ҙә булһа айырым өлөштәре менән түгел, ә үҙенең бөтә киңлектәре, төҫ-буяуҙары, бөтә дәүерҙәре, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәй. Ватанды өлөштәргә, киҫәктәргә бүлеп яратыу мөмкинме һуң?

Тауҙарҙағы йәшен йәшнәүе лә, сабый бала көлөүе лә, далалағы яңғыҙ уба ла, республикам өҫтөндә елберләгән өс төҫлө байраҡ та — улар бөтәһе лә минең Ватаным.

Ватаным тиһәк, ергә уны үҙҙәренең эш-фекере менән биҙәү өсөн килгән, был донъяла әллә күпме байлыҡтар ҡалдырып киткән ата-бабаларыбыҙҙы күҙ алдына килтерәбеҙ. Ватан тиһәк, беҙ хәтер, мөхәббәт һәм хыялды ла аңлайбыҙ. Уның үткәндәре менән ғорурланам да, хәсрәтләнәм дә мин, бөгөнгөһөн яратам, киләсәге тураһында тулҡынланып уйлайым.

**Эштәр:**

1. ***Йөрәгемдә, далалағы, байлыҡтар*** тигән һүҙҙәрҙең тамырын, ялғауҙарын билдәләргә.
2. Ҡушма исемдәрҙе табып яҙырға

## ҠЫШҠЫ СӘСКӘЛӘР.

Беҙ урманға килеп индек. Ҡалай күркәм! Йәйен япраҡтарын леперләткән, ботаҡтарында аҫыл ҡоштар һайраҡан имәндәр тынып ҡалғандар. Бөтә ерҙә йондоҙҙай аҡ ҡар бөртөктәре емелдәй.

Аҡ йәймәләй ҙур аҡланға килеп сыҡтыҡ. Бында беҙ мышы эҙҙәрен күрҙек. Оҙаҡламай үҙҙәре лә килеп сыҡтылар. Уларҙы өркөтмәнек, һындарына, ғорур күтәрелгән баштарына һоҡланып ҡарап торҙоҡ. **Улар ҡуйы имәнлек араһына яй ғына атлап инеп киттеләр.** Беҙ ҙә улар артынан ҡуйы имәнлеккә инәбеҙ. Ҡапыл минең өҫтөмә ынйы туҙанындай ҡар бөртөктәре ҡойола. Ҡояшлы көндә минең кейемем меңләгән йондоҙ булып ялтырай.

Саңғы бауҙарын рәтләп алдыҡ та тау түбәненә остоҡ. Йөрәк сапҡан аттай ярһый, күҙҙәргә йәш тула, күңелдәрҙә һүнмәҫ дәрт, серле илһам һәм тәрән ғорурлыҡ уяна.

**Эштәр:**

*1.* Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ эшләргә

*2.* Ҡылым төркөмсәләренә миҫалдар табырға

## КҮҢЕЛЛЕ ВАҠЫТТАР.

Өлфәт менән Зәки бик матур, тыныс ҡына бер ятыуға тап булдылар. Ҡармаҡ ептәрен рәтләнеләр һәм һыуға ырғыттылар. Тәүҙә ҡалҡыуыстар ятыу өҫтөндә тыныс ҡына яттылар ҙа алмашлап бейергә керештеләр. Берәм-берәм эреле-ваҡлы сабаҡтар ҙа сыҡҡылай. Их, күңелле ваҡыттар!

**Көн кискә һарҡыу менән, сиртеү ҙә ҡыҙа барҙы.** Балыҡ йышыраҡ эләгә, улар торған һайын эрерәк була бара. Бынан да ҙурыраҡ шатлыҡ, бәхет кәрәкме ни балыҡсыға?

Баяғы урман ҡарауылсыһы малайы менән урын өсөн асыуланышыу ҡоштарҙың кем уҙарҙан сутылдашыуы-ние менән онотолдо. Ҡояш байыны, шаҡтай ҡараңғы төштө. Сиртеү ҙә бик ныҡ һирәгәйҙе, ахыр сиктә бөтөнләй туҡталды. Малайҙар ҙа күтәренке күңел менән ҡайтырға сыҡтылар.

**Эштәр:**

1. Ҡылымдарҙы һайлап яҙырға, төркөмсәләрен билдәләргә
2. Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ эшләргә.

## ҺАНДУҒАС ТАУЫШЫ.

Беҙҙең өй артында муйыл ағастары бар. Ағайым уларҙы үҙе бәләкәй сағында ултыртҡан. Хәҙер улар **ҙурайғандар**, яҙ һайын ап-аҡ сәскә аталар. Көҙ көнө ҡап-ҡара емеш бирәләр.

Мине муйылдың сәскәһе лә, емеше лә ҡыҙыҡһындырмай, ә иртә таңда уның **ботаҡтарына** ҡунып һайраған **һандуғастар** ҡыҙыҡһындыра, күңелде үҙенә тарта.

Һеҙҙең һандуғас тауышын ишеткәнегеҙ бармы? Ниндәй өҙөп һайрай ул! Ниндәй матур сутылдай! Кистән башлап таңға тиклем туҡтамай һайрай. Мин оҙаҡ-оҙаҡ уларҙы тыңлайым. Ҡайһы саҡта юрамал ҡурҡытҡан булам, ләкин улар минән ҡурҡмайҙар. Аҙ ғына туҡтап торған булалар ҙа икенсе ботаҡҡа күсәләр һәм тағы ла дәртләнеберәк һайрай башлайҙар.

**Эштәр:**

1. Өндәү һәм һорау һөйләмдәргә берәр миҫал табырға
2. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең тамырын, ялғауҙарын билдәләргә

**Изложение VI класс**

**ТӘНӘФЕС ВАҠЫТЫНДА**

Салт аяҙ көн. Оҙон тәнәфестә балалар мәктәп эргәһендәге текә ярҙан сана шыуа. Йылға аръяғында Күбә тауы күренеп ята. Ҡышын унда ҡар ятмай — ел һепереп тора.

Ҡапыл:

- Малайҙар, ҡарағыҙ әле, тауҙан әллә нәмә сабып төшөп килә! — тип һөрән һалды берәү. Ысынлап та, унда ниҙер бар ине. Бер нисә малай тауға табан йүгерҙе. Хайуандарҙың, оҙон-оҙон һикереп, алдан сабып килгәне ҡоралай ине. Арттағыһы бүрегә оҡшаған. Ауыл ситендәге һырынтыға килеп кереү менән, ҡоралай батты. Ул да булманы, уға бүре килеп йәбеште, йүгереп килеүсе малайҙар ҡысҡырыша, һыҙғырыша башланы. Ләкин бүре ҡасырға уйламай ҙа. Балаларға ғәжәп күренде был хәл. Тик шул саҡ килгән малайҙың:

- Бүре түгел! — тигән тауышы ишетелде. Балаларҙың бүре тигәндәре урман ҡарауылсыһының һунар эте булып сыҡты. Балалар ҡоралайҙы ҡотҡарып ҡалды. Меҫкендең ҡурҡыуҙан тамам хәле бөткән, яраларынан ҡан аға.

Ҡоралайҙы һарайға ябып ҡуйҙылар. Дәрестәр тамамланғас та, бер нисә малай уны тәрбиәләргә ҡалды. Яраларына йод һөрттөләр. Бер уҡыусы карболка килтерҙе. Ашарға бесән һалғайнылар, ҡоралай уға әйләнеп тә ҡараманы.

Шулай ҙа балалар күңелдәрен төшөрмәне, бер нисә йәшел миндек табып, уны тоҙло һыуға мансынылар ҙа төнгөлөккә ашарға ҡалдырҙылар. Эргәһенә биҙрә менән һыу ҙа ҡуйҙылыр.

Иртәнсәк, мәктәпкә килеү менән, балалар үҙҙәренең ҡунағы эргәһенә йүгерҙе. Ҡоралай миндектәрҙең япрағын ашап бөтөргән, һыуҙы эскән. Шулай итеп аҙна-ун көн самаһы үтеп тә китте. Ҡоралай балаларға эйәләште, хәҙер инде ул ҡулдан икмәк тә ашай башланы, яралары төҙәлде. Артабан ҡоралайҙы мәктәптә тоторға ярамай ине, шуға күрә балалар бик сыуаҡ бер матур көндө уны урманға ебәрергә булды.

Дәрестәр тамамланғас та, улар ҡоралай менән хушлашырға ҡалды. Яланға сығарып, мөгөҙөндәге бауҙы алғас, кейек, ни эшләргә белмәгәндәй, бер аҙ урынынан ҡуҙғалмай торҙо. Бер урманға, бер балаларға ҡараны. Тик кемдер һайт тип ҡысҡырғас ҡына, ҡапыл һикерҙе лә урманға табан сабып китте.

## ИЛГИЗӘРЗЕҢ ЭШЕ

Илгизәрзең әсәһе унын ҡулына кәтмән килтереп тотторзо ла баҡсалағы картуфты күмергә ҡушты.

Был юлы ҡарышып-нитеп торманы Илгизәр. Яйлап ҡына баҡсаға табан йүнәлде. Бына ул аҙбар артында ғына үҫеп ултырған тәүге картуфтың тирә-яғына күпереп ятҡан йомшаҡ тиреҫте тауҙай итеп өйөп ҡуйҙы. Икенсе төп тә хөрт эшләнмәне. Ә бына өсөнсөһө генә яртылаш күмелде тигәндә, Илгизәрзең ҡулынан кәтмәне төшөп китмәһенме. Кәтмәнен алырға тип эйелгәндә, нисектер уға ергә тубыҡланырға тура килде. Ә ер шундай йомшаҡ, шундай йылы ине. Ул аҙ ғына ятып ҡарарға булды.

Илгизәрзең яланғас арҡаһын ҡояш рәхәт итеп ҡыҙҙыра, ара-тирә иҫкеләп ҡуйған еләҫ ел уны иркәләй ине. Тағы ла саҡ ҡына ятаһы килде Илгизәрзең. Ә бына ҡуҙғалайым ғына тигәндә, унын күҙҙәре ҡырмыҫҡаларға төштө. Әллә ҡайҙан күсеп килгән ошо ваҡ ҡына йән эйәләре тупраҡ өйөмөнә һөжүм итергә тотондо. Береһе- бер тик тормай, бер туҡтауһыҙ үҙҙәренән ҙур балсыҡ киҫәктәрен күтәреп ҡайҙалыр ташыйҙар, зыҡ ҡубалар.

Вәт әй, Илгизәр ҡояшта ҡыҙынып ятҡан арала ҡырмыҫҡалар үҙҙәренә йорт әҙерләп инде. Әллә шуларҙан көнләшепме, әллә тик ятыуҙан ялҡыпмы, ул үҙе лә урынынан ҡуҙғалды. Иренеп кенә кәтмәне менән ергә төрткөләй башланы.

Башта үҙе сығарған йырҙарҙы төрлө көйгә һалып йырланы. Үҙе йырлай, үҙе эшләй. Юҡ, ул үҙен картуф баҡсаһында итеп кенә түгел, барабандар ҡағып, оркестр менән уҙған сафтарҙа барғандай хис итте. Кәтмәне ҡулында уйнап ҡына торҙо. Ул хатта әсәһенең төшкө ашҡа саҡырыуын да ишетмәне. Маңлай тирен һөртөргә тип туҡталған сағында ғына артына әйләнеп ҡараны. Был ниндәй мөғжизә: ярты баҡса күмелгән дә ҡуйған! Йөҙө таңдай балҡыған Илгизәр, кәтмәненә таянып, бер аҙ баҫып торҙо. Ошо саҡ унын ҡолағына күрше Ғабдулла бабайҙың яғымлы һүҙҙәре ишетелде:

— Нисә әйтһәң дә, бөркөттән бөркөт тыуа шул!

**7 класс**

**Аласыҡ**

Утрауҙа ҙур ғына бер аласыҡ ултыра. Камил менән Рифҡәт бының балыҡсылар аласығы икәнен төшөнөп алдылар. Ул айырым бер кемдеке лә түгел. Бында һәр кем килеп ҡуна ала. Йыйылып ҡына һөйләшмәһәләр ҙә, төрлө ерҙән төрлө ваҡытта балыҡҡа килеүселәр араһында күп йылдар буйы бер килешеү йәшәй. Бында килгән һәр бер кеше аласыҡты эшләү, уны яҡшыртыу өсөн үҙенең өлөшөн индерә. Берәүҙәр ситәнен үргән, икенселәр башын япҡан, өсөнсөләр иҙәненә таш түшәгән, бүтәндәре һике, өҫтәл яһаған.

Һәр кем үҙенән һуң килгән иптәштәрен ҡайғырта. Берәү шырпы, икенсеһе берәй банка консерва, өсөнсөһө икмәк ҡыйырсығы ҡалдыра. Ә һике аҫтында һәр саҡ ҡоро сыбыҡ-сабыҡ була. Теләһә ниндәй йонсоу көндәрҙә лә уның менән усаҡ үрләтеп алаһың. Яҙҙан бирле кемдеңдер шинеле, бер нисә яһауы менән иҫке мылтығы ла ошонда тора.

**Эштәр:**

1. Тәүге һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатырға

2.Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәргә миҫалдар яҙырға

## ҠЫШЛАУСЫ ҠОШТАР.

Ҡыш. Бөтә ерҙә ап-аҡ ҡар һырынтылары. Урман тып-тын, ул уйға сумған төҫлө. Ҡар аҫтындағы ағастар әкиәттәге кеүек булып ҡалғандар.

Ғинуар беҙҙең яҡта бик ҡаты була, һалҡындар хатта 40 градустан да уҙып киткеләй. Ыжғыр буранлы көндәр күп. Ел һыҙғыра, олой, ҡоторона, ләкин ул ҡапыл туҡтай. Һыуыҡ йомшара, тағы ла тынлыҡ урынлаша.

Тәжрибәле натуралист һәр саҡ ҡарҙа ҡышҡы йән эйәләренең эҙҙәрен таба. Бына ҡар өҫтөндә дегәнәк баштары туҙҙырылған, бында ҡарабаш турғайҙар ем эҙләгән.

**Сел, һуйыр, ҡор кеүек ҡоштар сатлама һыуыҡтар үткәнен тәрән ҡар эсендә көтәләр.** Тик һайыҫҡан, ҡарға, турғайҙар ғына көслө һыуыҡтарға бирешмәйҙәр, улар кеше йәшәгән урындарға яҡыныраҡ киләләр. Сөнки бында аҙыҡ табыуы еңелерәк уларға. Поляр өкөһө төньяҡта йәшәй, ә ҡышын беҙгә күсеп килә.

Башҡортостанда 70-тән артыҡ ҡош ҡышлай. Һеҙҙә ниндәй ҡоштар ҡышлай? Уларға һеҙ нисек ярҙам итәһегеҙ?

**Эштәр:**

1. Тиң киҫәктәрҙең аҫтына һыҙырға
2. Билдәләнгән һөйләмдең төрөн билдәләргә

## Ҡайтыу

Аяҙ көн. Таң алды. Станция әле йоҡлай. Тышта көҙ. Шулай ҙа күңелдәрҙә шул тиклем йәнлелек, сәскәле яҙ ине. Егеттәрҙең кисерештәрен уртаҡлашып, ай ергә көләс нурын һибә.

**Йәнғәли менән Тимерғәли икеһе лә ауыл хужалығы техникумын тамамланылар ҙа шул йылда уҡ армияға киттеләр.** Ә бына хәҙер, хеҙмәттәрен тултырып, бергә ауылға ҡайтып киләләр.

Бына инде тыуған ауыл. Әле ул уянмаған. Егеттәр һәр бер йортто, һәр бер ҡапҡаны күҙҙәре менән ҡапшап үттеләр. Ауыл үҫеп, ҙурайып киткән, яңы йорттар артҡан. Бөтәһе лә күңелгә шул тиклем яҡын, изге бында.

Бына ауылды урталай бүлеп үткән, егеттәр бәләкәй саҡта бәпкә һаҡларға йөрөгән кескәй йылға. Ана, кистәрен уйынға сыға торған ҡаршы тау...

Бына тыуған йорт. Йөрәк тулҡынланып, дөп-дөп тибә. Йәнғәли әкрен генә тәҙрә шаҡыны.

**Эштәр:**

1.Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ эшләргә

2.Тиң киҫәктәрҙең аҫтына һыҙырға

## Яҙғы тантана

Яҙҙың иң тантаналы көндәренең береһе — колхозсыларҙың сәсеүгә сығыу ваҡыты килеп етте.

Иң тәүҙә, геүләп, дыр-дыр итеп, Айбикә ултырған трактор, унан Әхәйҙең тракторы ҡуҙғалды. Улар артынан бөркөлөп сыҡҡан төтөн сыр-сыу килгән халыҡ араһынан бөтә ишек алдына йәйелде. Тракторсыларҙың өҫтәрендә майлы кейемдәр, өлкән күн бейәләйҙәр, һөргән ваҡытта кейә торған өлкән түңәрәк күҙелдеректәрен маңлайҙарына күтәреп ҡуйғандар. **Тракторҙың алғы өлөшөнә беркетелгән бәләкәй генә ҡыҙыл флагтар ҡояш аҫтында тағы ла ҡыҙылыраҡ булып елберләйҙәр.**

Трактор артынан икешәр ат егелгән ике сәскес машина, тимер тырмаларға егелгән аттар, сменаға тигән парҙары менән ҡапҡанан сыҡтылар. Улар артынан орлоҡтар тейәлгән, аҙыҡтар һалынған, кешеләр ултырған бер нисә арба, улар менән ҡатар һыбайҙар. Шулар араһында агроном менән Алтынбай аттарын аяңлатып бара. Трактор геүелдәүе, егелгән аттарҙың бышҡырыуы, бисә-сәсә, бала-сағаларҙың сыр-сыуҙары, ҡысҡырыш-көлөштәре менән сәсеүселәрҙе ауылдан оҙатып ебәрҙеләр.

**Эштәр:**

1. Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ
2. ***Айбикә*** һүҙенә фонетик анализ

**Изложение VII класс**

## ВӘЛИ МЕНӘН ҒӘЛИ

Бына көткән көн дә килеп етте. Бөтәбеҙ ҙә ап-аҡ ҡар менән ҡапланған киң Ағиҙел өҫтөндә торабыҙ. Беҙ километр ярым барырға ла ошонда әйләнеп килергә тейешбеҙ. Ҡайһы класс командаһы был араны тиҙерәк үтә, шул команда беренсе урынды ала. Иң ҡыҫҡа ваҡыт эсендә үткән саңғысыға ла беренсе урын бирелә.

Мине, кластың алдынғы булып сығыуына ҡарағанда ла, үҙемдең беренсе булып килеүем ҡыҙыҡһындыра.

Шуға күрә йөрәгем сығырҙай булып тибә. Ғәлиҙең дә йөрәге шулайҙыр, тип уйлайым.

Бөтәбеҙ ҙә теҙелдек һәм, «марш» тигәс тә, бер юлы алға табан остоҡ.

Тәүҙә күҙемә аҡ-ҡара күренмәне. Бөтә көсөмдө һалып ынтылдым. Бына бер ваҡыт алдымдағы ҡар диңгеҙе нисектер тулҡынланған кеүек була башланы. Балтыр иттәрем ауырайған һымаҡ. Әле ярты юлға ла ételмәгән, былай булһа, эштәр насар. Тирә-яғыма ҡолаҡ һалам һәм тиҙ генә артыма боролоп ҡарайым. Минән бер егерме метрҙар самаһы артта Ғәли килә. Уның үксәһенә баҫып уҡ тип әйтерлек дүртенсе «Б» класынан ике малай елә. Башҡалар бөтәһе лә артта ҡалған.

Үҙемдең иң алда барыуымды, Ғәлиҙең байтаҡ артта килеүен күргәс, бер ни тиклем көс өҫтәлгәндәй булды. Мин тағы ла дәртләнеберәк алға ынтылдым.

Бына ярты юл. Мин кире боролдом. Бәм күп тә үтмәй, Ғәли ҡаршыһына килеп еттем.

Ләкин бынан һуң оҙаҡ бара алманым. Бер ҡар өйөмөн бик еңел генә үтеп китмәксе булып, аяҡтарымды киң баҫып кирелгәйнем, бер саңғым ҡар аҫтында торҙо ла ҡалды. Саңғымды кейеп алырға уйланым. Ләкин кейерлекме һуң? Уның ҡайышы төптән үк өҙөлөп сыҡҡан! Ни эшләргә лә белмәйенсә, артымдан талпынып- талпынып килгән Ғәлигә асыу менән ҡарайым. «Ҡара һин уны, шатлығынан нисек елә», — тип уйлайым.

Күп тә үтмәне, Ғәли выжлап килеп тә етте. Был нисегерәк уҙып китер икән тип торғанда, ул, минең эргәлә туҡтап:

- Ни булды? — тип һораны.
- Ҡайыш өҙөлдө...
- Арыманыңмы, барырға рәтең бармы? Мин арыным, уҙып китеүҙәре бар, күрәһеңме, «Б» кластары нисек килә, мә кей минекен, — тине ул саңғыһын һала-һала, — алдынғылыҡ беҙҙең класта булырға тейеш...

Ни эшләмәк кәрәк, ул, кеҫәһенән бәкеһен алып, минең саңғым менән булашып ҡалды. Ә мин уның саңғыһын кейҙем дә алға ынтылдым.

Бик оҙаҡ барғас, артыма боролоп ҡараным. Ни күҙем менән күрәйем: минең арттан өсөнсө булып Ғәли килә. Был ваҡытта йөрәгем үҙем өсөн генә түгел, Ғәли өсөн дә, үҙем уҡыған «А» класы өсөн дә дөп-дөп тибә башланы.

Ярты көсөмдө бүлеп биреп, Ғәлиҙе минең арттан килгән малайҙан алға сығарғы килә. Һәм бына, бына... Әйтерһең, ошолай уйлауым ғына кәрәк булған: Ғәли теге малайҙың йәнәшәһенә үтте, әҙерәк уҙҙы һәм, бер аҙ барғас, бөтөнләй алға сыҡты.

Мин ошо ваҡытта финишҡа килеп етеүемде лә һиҙмәнем, ундағыларҙың миңә ҡул сабыуҙарын да ишетмәнем. Тиҙ генә артыма боролдом да Ғәли өсөн бөтә көсөм менән ҡул саба, ҡысҡыра башланым:

— Шәберәк, Ғәли! Шәберәк! Еңеү беҙҙә!..

Беҙ ярыштан Ғәли менән икәү ҡайттыҡ. Ул юл ыңғайында миңә өләсәһенең ҡунаҡҡа килеүе, иртәгә үҙҙәрендә шыршы байрамы буласағы тураһында һөйләне. Байрамға мине лә саҡырҙы.

## ЫСЫН ДУҪЛЫҠ

Яҙма эш ваҡытында, иң аҙаҡҡа ҡалып, звонок булғансы ултырһам да, миҫалды эшләй алманым. Ғәрләндем дә, Рәхмәткә асыуым да килде. Саҡ ҡына әйтеп ебәрһә була бит инде. Дәрестәр бөткәс, ошо асыуымдан ауылға Рәхмәт менән бергә ҡайтҡым килмәне. Был хәлдән һуң Рәхмәт менән минең аралар көндән-көн нығыраҡ һыуына барҙы. Дәрес бөткәс, мәктәптән һәр саҡ тиерлек алдан сығып һыҙам. Иртән мәктәпкә бер үҙем сығып китәм.

Рәхмәт ҡыуып етмәһен тип, артыма ҡарай-ҡарай, шәп-шәп атлайым. Епшек ҡарҙа резина итегем тайып, бер-ике рәт йығылып та алдым. Бына хәҙер Ҡамышлы йылғаһы аша бер генә бүрәнәнән һалынған баҫманы үттемме, ат менән урауҙан йөрөй торған оло юлға сығам. Унан Ташморонға бер саҡрым самаһы ғына ҡала. Баҫманан, башҡа ваҡыттағы шикелле, йүгерә-атлай сығып килә инем, ҡапыл аяғым тайып, көҙгө ямғырҙарҙан һуң ташып буръякланған һалҡын һыуға ҡайһылай атылып төшкәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Ҡайһы еремдер үҙәгемә үтеп ауыртты. Ләкин, ҡыҙыулыҡ менән уны онотоп, тиҙерәк аяҡ үрә баҫтым да, баҫмаға йәбешә-йәбешә, ярға атланым. Артыҡ текә булмаған ярға тырышып-тырмашып менгәс, тороп йүгереү өсөн баҫырға булғайным, һул аяғымдың яман ауыртыуына түҙә алмайынса сүгәләнем, унан, аяғымды һоноп, еүеш ергә ултырҙым. Бәкәлемдең өҫ яғынан аяғым йәнемде өҙөп һыҙлай. Итекте сисеп ҡарамаҡсы булып, аяғымды ҡуҙғатҡайным, яман ауыртыуҙан артыма саҡ ауып төшмәнем. Кейемем һыуланған, өшөттөрә лә башланы. Ни эшләргә? Урынымдан тормаҡсы булып, тағы ла бер ынтылып ҡарағайным, был юлы бәкәлсәйемә күҫәк менән килтереп һуҡҡандай булды, ҡар өҫтөнә йығылып, иҫемде юғалттым...

...Күҙемде асып ебәргәндә, күҙемә тәү бәрелгән нәмә Рәхмәт булды. Туҡта әле, ни эшләп мин былай епшек ҡар өҫтөндә ятам? Э Рәхмәт ҡасан ҡыуып еткән тағы? Ләкин миңә оҙаҡ икеләнергә тура килмәне. Аяғымдың һыҙлауы миңә булып үткәнде тиҙ хәтерләтте.
- Ни эшләнең һуң, Әсҡәт? — ти Рәхмәт, миңә эйелә биреп. Ул тир бөрсөктәре тәгәрәгән маңлайын, битен ҡулъяулығы менән әленән-әле һөртөп ала. — Хәҙер ауыл осона тиклем күп булһа йөҙ метр ҡалғандыр, түҙ, Әсҡәт, — тип Рәхмәт миңә эйелә.
- Нисек инде йөҙ метр?
- Мин бит һине Ҡамышлы ярынан бирле күтәреп алып килдем. Әле хәл йыйырға туҡтаным. Шуны ла белмәйһеңме ни?
Бына нисек икән! Бөтәһен дә аңлайым, ләкин, Рәхмәттең күҙ ҡарашы менән осрашырға уңайһыҙланып, ситкә боролам. Ә ул мине яурыны аша күтәреп һалды ла, бысраҡ кисеп, тағы алға йүнәлде...
Ауыл осондағы өйҙән мине ат менән больницаға алып барҙылар. Ҡуңысын телеп, итегемде систергәс, врач, көптәй шешеп киткән аяғымды ҡарап:

- Һынған, һис кисекмәҫтән гипс һалырға кәрәк, — тине.
Төштән һуң эргәмә, атайым менән әсәйемә эйәреп, Рәхмәт тә килде. Врач ағай:
- Борсолмағыҙ, ун биш-егерме көндән шап-шаҡтай булыр. — Шулай ти ҙә  Рәхмәткә әйләнеп ҡарай. — Бына был егеткә рәхмәт әйтегеҙ. Әгәр ул булмайынса, һыулы кейеме менән ҡар өҫтөндә ятып, һыуыҡ тейҙерһә, эш хөртөрәк булыр ине.

Рәхмәткә ҡарайым. Ул, үҙен маҡтағанға уңайһыҙланған шикелле, башын түбән эйеп, һүҙһеҙ баҫып тора.

**8 класс**

# МӘШӘҠӘТЛЕ КӨНДӘР.

Марттың үткер еле, ҡар битен ашап, ваҡ ҡына шаҙралар яһай, белендермәй генә иретә. Өй артындағы муйыл ҡыуағының ҡыу ботаҡтарына теҙелгән биш-алты турғай, ниҙер сүтерләшеп, бер осоп, бер ҡунып, сыр- сыу киләләр. Өй алдының көньяҡ мөйөшөндәге яңғыҙ өйәңке ботағына ҡағылған сыйырсыҡ ояһына ла ҡайһы бер турғайҙар, парлашып инеп-сығып, ояны ошонда әҙергә ҡорғанда, нисек булыр икән, тигән һымаҡ сыулашып һөйләшәләр. Күрәһең, йәшерәктәренең был ояға күҙе төшһә лә, олораҡтары риза булмайҙарҙыр йә, үҙҙәренең шунда инеп ултырғылары килеп, үҙ-ара талашаларҙыр. Кем белә инде, улар, бәлки, былтыр яҙ булып үткән ваҡиғаларҙы хәтерҙәренә төшөрөп, был эштең файҙаһыҙ булыуын иҫбат итә торғандарҙыр, сөнки улар, былтыр ҙа шулай иртә генә килеп, ошо сыйырсыҡ ояһына урынлашып ҡарағайнылар ҙа, сыйырсыҡтар, көҙ көнө киткән ерҙәренән ҡайтып килеү менән, турғайҙарҙы сырылдатып ҡыуып сығарҙылар.

Юлия тәҙрә яңағына һөйәлеп тора, ул ошо турғайҙарҙың эштәрен дә ҡарай, ҡыйыҡтан тамған һирәк тамсыларға ла күҙ һала, ләкин уйҙары әллә ҡайҙа — алыҫта.

**Эштәр:**

1. Текстан ҡушма һөйләмгә миҫал табырға һәм шартлы тамғалар менән билдәләргә.
2. Ҡушма исемдәрҙе һайлап яҙырға

## ҺАЙ, ДОНЪЯҺЫ!

Салт аяҙ көн. **Зарифа әбей биҙәкле яулығын рәтләштерҙе лә, юл ситенә сығып, аяҡтарын һуҙып ергә ултырҙы.** Май ҡояшы аҫтында ер сәңгелдәктәге бала кеүек иркәләнеп ята. Бар тирә-яҡты үтә сағыу йәшеллек ҡаплаған. Бына һабан турғайҙары күк һауаға күтәрелделәр һәм үҙҙәренең бөтмәҫ йырҙарын сырылдайҙар.

Ана трактор ер һөрөп йөрөй. Ер, тулҡынланып ятҡан ҡара таҫма булып, алыҫ-алыҫтарға һуҙыла. Трактор артында мамыҡтары ялтырап торған сөм- ҡара сыйырсыҡтар һәм ҡарғалар ем сүпләп йөрөйҙәр. Улар бураҙна араһында бер күренәләр, бер күҙҙән юғалалар.

Яҙғы һауа йомшаҡ, тын алыуы шундай рәхәт, еңел. Зарифа әбейҙең күптән инде яланда булғаны юҡ ине. Һай, донъя ҡайһылай матур!

**Эштәр:**

1. Ҡалын хәрефтәр менән яҙылған һөйләмгә синтаксик анализ яһарға.
2. ***Яҙғы*** тигән һүҙгә фонетик анализ эшләргә

## ТОРМОШ ЙӘМЕ.

Тәбиғәттең үҙ вайымы менән ағышын ситтән генә күҙәтеп торһаң, ер йөҙөн иң әрһеҙ, бер үк төрлө ағастар ғына ҡаплап алмаҫ тимә. Әгәр шулай була ҡалһа, бер төрлө генә ағас үҫкән урмандың ни йәме? Уның хәҙерге төҫө лә, хуш еҫе лә, хозурлығы ла булмаясаҡ бит. Матурлыҡ— төҫтәр, еҫтәр төрлөлөгөндә ул. **Уларҙы беҙ, кешеләр, илебеҙҙең ысын хужалары, һәр ҡайһыһын үҙ урынына ҡуйырға, үҙенсә балҡыта белергә тейешбеҙ.** Имәнгә — имән, ҡарағайға — ҡарағай, уҫаҡҡа — уҫаҡ, ҡайынға- ҡайын алмашҡа килһен. Юғиһә мәғрур имәнһеҙ, зифа ҡайынһыҙ, мәңге йәшел ҡарағайһыҙ, ут ҡыҙыл миләшһеҙ урмандың ни йәме?! Бал тамыҙған йүкә сәскәһеҙ, балыҡ ҡаптырыр муйыл сәскәһеҙ урмандың ни еҫе?! Туғайҙағы әрәмәләр урынында өйәңкеләр генә һерәйешеп ултырһа, һандуғастар уны төйәк итерме?

**Эштәр:**

1. Ҡалын хәреф менән яҙылған һөйләмгә синтаксик анализ яһарға.
2. Һуңғы һөйләмдең төрөн билдәләргә

***

Мин аҡкошҡа оҡшатып эшләнгән көршәктән һоҡланыулы күҙҙәремде ала алмайым.

...Бына юғарыға табан оҙонсаланып, аҡкош муйынына барып тоташҡан йомроraҡ ҡорһағына ҡойроҡто уралта терәп, туҙбаш йылан көршәктән һыу эсергә ынтылған. Уның йыланса нәфис, бормас тәне лә, айырса теле лә ҡыбырлап тора һымаҡ... Был — көршәктең тотҡаһы, тау ҡыҙҙары уны, ошо туҙбаш йыландан тотоп, яурындарына күтәреп ултыртҡандар...

Көршәктең эсе аҡһыл зәңгәргә буялған, ә тышы иртәнге аҡ томан баҫҡан, мең төрлө сәскәгә күмелгән туғайҙы хәтерләтә. Аһ, ниндәй генә сәскәләр юҡ был туғайҙа! **Иң ғәжәбе шул: уларҙың береһе лә төшөрөлгән түгел, ә үҙ стихияһына наҙланып ултырған тере сәскәләр!** Бына әле генә йәшенле ямғыр яуған, уның артынса ҡояш балҡып сыҡҡан, сәскәләр шуға һөйөнөп көлөп ебәргән! Мөғжизә!

Ә бына бында, теге туҙбаш йылан үрелеп сыҡҡан ерҙә, тау ландышы яңы ғына сәскә атҡан. Ынйы кеүек нәфис кескәй ҡыңғырау сәскәләр. Улар шул хәтле тереләр, хатта уларҙың хуш еҫтәре танауға бәрелгән һымаҡ.

**Эштәр:**

1. Өҙөккә исем бирергә.
2. Билдәләнгән һөйләмдең төрөн билдәләргә

## Изложение VIII класс
## МИШКА

«Карапҡа айыу балаһы алып ҡайтҡандар», — тигәнде ишетеү менән, уҡтай атылып, ишеккә ташландым.

Мин ингәндә, Мишка, үҙен һырып алған матростарҙан шөрләпме, карауат аҫтына ҡасҡан да тын алырға ла ҡурҡып ултыра ине. Э моряктар, ҡунаҡтың ҡайһы кубрикта[1] йәшәргә тейешлеген асыҡларға тырышып, үҙ-ара һүҙ көрәштерә. Айыу балаһын алып ҡайтҡан по- вар Чепежко тупаҫ ҡулдары менән Мишканы һөйә-һөйә:

— Тыныс булығыҙ, иптәштәр, бөтәһе тураһында ла ҡайғыртылған, — тине.

Шул арала Чепежко үҙен иғтибарлы тәрбиәсе итеп күрһәтергә лә өлгөрҙө: бер һауыт компот, макарон алып килде. Айыу балаһы яратып ашаманы ашамлыҡты. Э компотты еҫкәп кенә ҡараны ла, асыуланып, түкте һәм һауытын тәгәрәтеп уйнай башланы. Эле генә ҡурҡып ултырған Мишканың ҡапыл шулай батырайып китеүе беҙгә лә бик ҡыҙыҡ булып китте. .

Бер көндө Чепежко, ҡайҙандыр тельняшка[2], беско- зырка, салбар табып алып килеп, Мишканы диңгеҙселәр формаһына кейендерҙе. Был ҡыҙыҡ күренештән моряктар эстәре ҡатып көлөштө. Айыу балаһы бик тиҙ эйәләште. Үҙен ҡыйыу, иркен тотоп, артҡы аяҡтарына баҫты ла бескозырка таҫмаларын елберләтә-елберләтә палубаға сыҡты һәм күптән әҙерләнгән «концертын» күрһәтте.

Ваҡыт үтә барған һайын, Мишканың дуҫтары ла күбәйҙе, һәм ул үҙен экипаждың ябай ағзаһы итеп һиҙә башланы. Моряктар буш ваҡыттарында уның менән уйнай, шаяра. Мишканы күрер өсөн хатта күрше хәрби пастарҙан да килә торғайнылар. Эгәр концерт-фәлән була ҡалһа, ул түңәрәк буйынса әйләнеп бейей һәм, бейеп бөткәс, ҡыйыш-мыйыш баҫып, алҡыштар аҫтында баш эйә, рәхмәтен белдерә.

Мишка карапта́ғы көн тәртибенә лә күнекте: беҙҙең менән бергә ята, бергә тора. Һуңға ҡалыусыны күрһә, аяғынан тешләп торғоҙа. Әгәр юлда йыуғыс, һабын, таҫтамал тотоп барыусы осраһа, тиҙ генә алдан душҡа саба. Йөндәрен таҙартырға янындағы матросҡа тарағын һәм йыуғысын һуҙа.

Айыу балаһы үҫте, матурланды, аҡылға ла ултырҙы. Ул компотты хәҙер бик ярата. Компот бирмәһәң, кәйефе ҡырыла. Повар Чепежко ҡайһы саҡта юрый һауытын тултырмай бирә. Мишка тиҙ генә эсә лә һауытын яңынан күтәреп килә. Ашап туйғас, ҡыҙыҡ яһар өсөн, һуҙылып ята ла ҡорһағын тырнай башлай.

Мишка диңгеҙ походтарына ла йөрөргә ратты. Шторм ваҡыттарында үҙен батыр тотоп, командир һәм офицерҙарҙың маҡтау һүҙҙәрен дә ишетте ул.

Бер ваҡыт көтөлмәгән хәл булды. Мишка юғалған тигән хәбәрҙән моряктар аптырап ҡалды. Ашау-эсеү ҡайғыһы китте. Командир рөхсәте буйынса иртүк уны эҙләргә сыҡтыҡ. Баянды ла үҙебеҙҙән ҡалдырманыҡ. Музыка тауышына

килер, тип уйланыҡ. Чепежко ашамлыҡтар ҙа алды. Ләкин, күпме генә эҙләһәк тә, Мишканы таба алманыҡ. Бик арығас, Мишка, бәлки, үҙе ҡайтып килер әле тип, карапҡа табан йүнәлдек. Ләкин Мишка ҡайтманы. Бер көн, ике көн, өс көн үтте, әммә ул килеп сыҡманы.
Көндәр бер-бер артлы уҙҙылар. Һалҡын поляр түңәрәк аръяғына ла йылы йәмле яҙ килде. Соҡор-саҡырҙарҙа, үҙәндәрҙә ҡар һыуҙарынан йылға, күлдәр барлыҡҡа килде. Томанлы поляр төндәр артта ҡалды. Бер ваҡыт көтмәгәндә Мишка ҡайтҡан тигән хәбәр ишеттек. Мишка ҡайтҡан! Ул, башын түбән эйеп, «мин ғәйепле» тигән һымаҡ, баҫып тора. Беҙ уның күңелен күтәрергә тырыштыҡ. Моряктар Мишканы душта йыуындырҙы, поварҙар туйғансы ашатты, Чепежко уны өр-яңынан кейендерҙе.

Мишка ябыҡҡан, йонсоған, ә үҙе үҫкән һымаҡ. Йөндәре лә ҡалыная төшкән. Күрәһең, күп ваҡытын йоҡлап уҙҙырғандыр. Ләкин Мишка элеккесә шат, көр күңелле ине, «Яблочко»ны уйнап ебәреүгә, ул ашыҡмай ғына артҡы аяҡтарына баҫты ла, эре-эре атлап, бейеп китте.

## ШАЯН ҺАЙЫҪҠАН

Саҡ беленеп торған һуҡмаҡ мине кордонға илтеп сығарҙы. Шул саҡ түбәндән генә бер һайыҫҡан осоп китте. Ҡараһам — бер ҡайын осона менеп ҡунды теге. Минең килгәнде иҫкәртеп, күрәһең, һайыҫҡан шыҡырыҡлай башланы. «Һин ниңә бик шыҡырыҡлайһың әле? — тинем мин. — Ҡунаҡты шулай ҡаршылайҙармы ни?»

Кордонға күп булһа бер километр ҡалғандыр. Теге һайыҫҡан, ағастан-ағасҡа ҡунып, ҡысҡырыуын дауам итә.

Яңғыҙ торған бер бәләкәй өй эргәһенә килеп еттем. Ҡарауылсы йәшәй икән бында. Миңә ҡаршы ишектән бер малай килеп сыҡты.

- Һаумы, ҡустым! — тинем тегегә. — Һин бында тораһыңмы?
- Эйе, һеҙгә кем кәрәк?
- Һеҙгә ҡунаҡҡа килдем.

Артабан беҙ Мәжит менән бик ныҡ дуҫлашып киттек, һәйбәт белә икән ул был яҡтарҙы. Төлкөләр һәм бурһыҡтар ҡайҙа йәшәгәнен, төрлө ҡоштарҙың ҡайҙа оя ҡорғандарын да әйтә. Шәп натуралист икән үҙе.
Мәжиттәрҙә тороуыма бер нисә көн үтте. Бер мәлде күлдәктең еңдәрендәге запонкаларын ысҡындырып алдым да, шырпы ҡабына һалып, өҫтәлгә ҡуйҙым.

Тәҙрә асыҡ ине. Киң япраҡлы саған ботаҡтарының селтәрле шәүләһе иҙәнгә төшөп тора. Бер нисә минутҡа ғына бүлмәнән сыҡтым. Әйләнеп килеүемә, өҫтәлдә запонкалар юҡ ине инде.
Был ни эш? Әле генә ошонда яталар ине бит. Тамам аптырашта ҡалдым.
- Мәжит, өҫтәлдәге запонкаларҙы алманыңмы? — тинем.
—Юҡ, ағай, алманым, — тине малай. Запонкаларҙы оҙаҡ ҡына эҙләнек, ләкин бер ҡайҙан да таба алманыҡ. Мәжит ҡапыл урынынан һикереп торҙо ла:
-Белдем! Ул запонкаларҙы һайыҫҡан алған! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.
- Аңламайым. Ни һөйләйһең һин?
- Әйҙә, ағай, киттек! — ти малай, мине еңемдән тартып.
Беҙ ҡайын төбөнә барып туҡтаныҡ. Ул, һайыҫҡан, тип һуҙып ҡысҡырҙы ла ағасҡа үрмәләп менеп тә китте. Мәжит һаман үргә күтәрелә бара, ҡарт ҡайын ботаҡтары араһынан уның күк күлдәге генә күренеп ҡалды. Бәй, был ни эш?! Ысынмы был, әллә күҙҙәремә генә шулай күренәме? Һайыҫҡан Мәжиттең башына килеп ҡунды.

- Был һинең эшеңме, һайыҫҡан? Ниңә кеше әйберен алаһың? Бир! — тине Мәжит һәм, үрелеп, тегенең ояһын ҡараны.
— Бына һеҙҙең запонкаларығыҙ ҡайҙа ята! — тип ҡысҡырҙы ул, ҡулын һелтәп.
Һайыҫҡан шыҡырыҡлай-шыҡырыҡлай ситкә осоп китте лә яҡындағы бер ботаҡҡа барып ҡунды.

Шаян һайыҫҡан урлаған запонкалар бына шулай табылды. Артабан Мәжит миңә был һайыҫҡанды бик бәләкәй сатынан тәрбиәләп үҫтереүе хаҡында һөйләне, һайыҫҡан уга эйәләшеп бөткән, уның ус төбөнән аҙыҡ ашай. Һалҡын көндәрҙә ул соланда ҡуна, ә иртән шыҡырыҡлай башлай: сығарығыҙ мине, ти, күрәһең.

Артабан ҡош миңә лә эйәләшеп китте. Ул яурыныма килеп ҡуна ла тыңлап тора: берәй йылы һүҙ әйтмәҫме икән, ти, күрәһең.

**9 класс**

**РАЙОН БАШЛЫҒЫ.**

Бынан һуң ике көн үткәс, Батыев «Ҡуштирәк»кә килеп сыҡты. Бик иртә килеп етһә лә, ауыл аяҡҡа баҫҡан, бөтә урында ла эш ҡайнай ине. Ул баҫыуҙа, йәйләүҙәрҙә, төҙөлөштәрҙә бер үҙе йөрөнө, ике-өс колхозсының өйөнә лә инеп сыҡты. **Батыевҡа кешеләрҙең эшкә йәбешеп ятыуы, киләсәккә ҙур өмөт менән ҡарауы оҡшаны.**

Райондың яңы башлығы килгәндә, Билалов өсөнсө бригадала халыҡтың нисек эшкә сығыуын тикшерә ине. Уның шулай, иртә таңдан тороп, берәй бригадаға барып сығыу ғәҙәте бар. Батыевтың килеүен ишеткәс тә, ул идараға ҡайтты. Район башлығы унда инеп тә тормаған. Кемдер идараға инеп: «Батыев сусҡасылыҡ фермаһына китте», — тине. Билалов: “Былай ярамаҫ, уны эҙләп табырға кәрәк”,- тип, сусҡасылыҡ фермаһына ҡарай юл тотто, шунда уға Әхмәҙуллин ҡарт тап булды.

— Ҡуй, ҡустым, яратмай ул төркөм-төркөм кешеләр эйәртеп йөрөргә. Мин уны беләм инде: шулай күҙәтеп йөрөй-йөрөй ҙә китер алдынан ғына ҡатыға ултырта. Күңеләңде киң тот, кәрәгең булғас, үҙе эҙләп табыр,- тине Әхмәҙуллин ҡарт.

Әхмәҙуллин ҡарттың күрәҙәлеге аҡланды: Ибрай ағай уны амбарҙар эргәһендә эҙләп тапты.

**Эштәр:**

1. Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ эшләргә
2. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе табып яҙырға

## ҠАРҘАР ЯУА.

Ҡарҙар яуа... Тирә-яғыңа ҡара әле, йәш дуҫым! Ер өҫтөндә, ҡоймаларҙа, түбәләрҙә ап-аҡ ҡар. Һин шул ҡарҙың тиҙҙән боҙбармаҡҡа әйләнәсәген, тамсылар булып тамасағын беләһеңме? Тамсылар йырлай-йырлай тамасаҡ, һин уларҙың йырын бөгөн үк ишетә, ни тураһында йырлауҙарын белә алаһыңмы? Әгәр шулай икән, мин һинең өсөн шатмын: һин киләсәктә һис шикһеҙ йырсы-композитор буласаҡһың.

Ҡар аҫтында ҡалған ҡарҙарға ҡарап, һин шаулап ултырған игенде, ергә эйелеп тирбәлгән башаҡтарҙы күрәһеңме? Әгәр шулай икән, һинең игенсе булырыңа, тыуған ереңде һөйөп, уға тир түгеп йәшәйәсәгеңә шик юҡ. Әгәр һин бәҫ һырыған ағас-ҡыуаҡ ботаҡтарында йәм-йәшел япраҡтар, ҡарлы яланда аллы-гөллө сәскәләр күрә беләһең икән, мин һинең рәссам булырыңа ышанам. Рәссам ғына түгел, һин гөл-баҡсалар үҫтереүсе, тормошта бары тик матурлыҡ ҡына ижад итеүсе булырһың.

Ҡар яуа! Яуһын, яуһын ҡар! Ул беҙҙең шаулап килер яҙыбыҙ, шау сәскәле йәйебеҙ, мул уңышлы көҙөбөҙ.

**Эштәр:**

1. **Тексты̧ң стилен билдәләргә**
2. **Рәссам тигән һүҙгә фонетик анализ эшләргә**

## ЙЫР ЙӨРӘКЛЕ ЕГЕТ.

**Был хәл бынан байтаҡ йылдар элек булған. Ауылда батырҙарҙан-батыр, аҡыллыларҙан-аҡыллы, сәсән телле, яҡты йөҙлө, сос йөрөшлө, күрер күҙгә һөйкөмлө бер егет үҫкән**. Ул, башҡорт ғәҙәте буйынса, бәләкәйҙән йылҡы әйҙәр, һунарға йөрөр, шоңҡар сөйөр, уҡ юныр, солоҡ эҙләр, ҡурай тартыр, йыр йырлар булған. Уның йырҙары шул тиклем моңло булған, иң ҡаты бәғерле кешенең дә күңеле балауыҙ һымаҡ ирер булған.

Егет, аяғына баҫып, киң күкрәген киреп, ай һымаҡ моңһоу күҙҙәрен алыҫтарға текләп, һыҙҙырып ебәрһә, тау-таш һыҡтаған, тып-тыныс ятҡан көҙгөләй күлдәр ҡайнап ыңғырашҡан, тынғыһыҙ ел һыҙғырыуҙан туктаған, шишмәләр аҡмай торған, ҡоштар тауыш бирергә оялған, ҡурай тоноҡланып ҡалған. Шулай йырлаған ул. Шулай моңло, аһ-зарлы булған егет яҙмышы — халыҡ яҙмышы. Йыры менән егет ауылдаштарының күңелен асҡан, ауыр тормошон онот-торған, көрәшкә саҡырған. Киләсәк кеүек матур йырҙар ҙа сығарған ул. Йыр йөрәкле егет тигәндәр уны.

**Эштәр:**

1.Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ эшләргә

2.Ҡушма һүҙҙәрҙе табырға

## ОҘОН ЮЛ.

Тирә-яҡта ҡалын урман. Октябрь башында уҡ ғәжәп бер төҫкә инә лә оҫта сигелгән келәмгә оҡшап ҡала икән ул. Әлморон менән миләш ҡыуаҡтары, һырға таҡҡан ҡыҙҙар кеүек, ҡыҙыл төймәләргә күмелеп ултыра. Яланғас ағастар һыҙатын, төрлө хәүефтәрҙән һаҡлағандай, көслө имәндәр уратып алған. Уларҙың ҡараһыу, ҡыҙылһыу япраҡтары аҡрын ғына ҡыштырлаша. Артабан инде йәй ҙә йәшел, ҡыш та йәшел шыршылар, күкһел ҡарағайҙар теҙелешеп китә. Был һылыуҙар, дәрәжә һаҡлағандай, тын ғына баҫып торалар.

Урман да тау, тау ҙа урман. Юлдың осо ла, ҡырыйы ла күренмәй. Тау һәм урман диңгеҙендә яңғыҙ елкән шикелле йөҙәһең дә йөҙәһең. Япа-яңғыҙың сәғәттәр буйы бараһың. Ниһайәт, аҡһыл төтөн күҙгә салына. Тимәк, кешеләр йәшәй был тирәлә.

Юл оҙон. Юл кеүек үк оҙон уйҙар. Хөрмәт саптарҙың лерт-лерт юртыуына һикерә-һикерә алға тәгәрәүсе кырандаҫҡа ҡырын төшөбөрәк ултырып алған да, береһен ишеп, икенсеһен һүтеп, уйҙарының осона сыға алмай килә.

**Эштәр:**

1. Текстың стилен төрөн билдәләргә
2. һүрәтләү сараларын табырға

**Изложение IX класс**

## ҺУНАРСЫ

Малайҙар араһында Нараткa тиң һунарсы юҡ әле. Нарат һунарға сыҡкан һайын ҡуянһыҙ ҡайтмай. Урман ҡарарға барғанда ла ул ҡушкөбәген, Аҡтырнағын ҡалдырмай.

Бына әле лә ул йәш ҡайын урманына килеп инде. Көн шаҡтай кисеккән булһа ла, ҡараңғы төшмәгәйне әле. Ул, урман ситендә туҡталып, бер аҙ хәл алды ла, ҡуян осрамаҫмы тип, Өсимән урманына ла һуғылып ҡайтырға булды.

Нарат Ҡаратал һәм Өсимән урмандары араһынан үткән оло юлға килеп сыҡканда, ҡояш байығайны. Ул, юл буйында туҡтап, бер аҙ хәл йыйып алырға булды. Саңғыларын һалып ағасҡа һөйәне лә төпкә барып ултырҙы. Наратты Аҡтырнаҡтың йәмһеҙ итеп сыйнап өрөп ебәреүе һиҫкәндерҙе: «Ни булған был Аҡтырнаҡҡа? Ниңә шулай яман ырылдай ул?»

Нарат, мылтығын әҙер тотоп, тауыш килгән яҡка атланы. Аҡтырнаҡ бер сыйнай, бер йәмһеҙ итеп ырылдай ине. Нарат ашығыуы менән абына-һөрөнә бер аҡланға крлеп сыкты һәм, алдындағы ғәжәп хәлде күреп, ҡатып ҡалды.

Уның Аҡтырнағы ҡот осҡос ҙур һоро йыртҡыс менән өҙгөләшә!.. Йыртҡыс эттең боғаҙынан эләктерергә маташты. Ләкин эт уға боғаҙын бирмәй, дошманының яңаҡтарын, морондарын сәйнәй.

— Бүре! Бүре бит был! — Ҡурҡыныслы был уй йәшен тиҙлегендә малайҙың маңлайын семетеп үтте. Ул үҙенең теҙ-быуындары ҡалтырай башлауын тойҙо. Бына бүре Аҡтырнаҡтың боғаҙын эләктереп алды ла ергә һуҡты.

Нараттың өҙгөләнеп ҡысҡырған тауышы менән мылтыҡ тауышы бергә яңғыраны. Ул атып ебәреүен һиҙмәй ҙә ҡалды. Ҡапыл бүре юғарыға һикерҙе лә лап итеп ҡарға ауҙы. Башын ҡар аҫтына тығып, тыпырсына башланы.

Башы яраланған йыртҡыс һуңғы һулышын ала ине. Шулай ҙа Нарат яҡын барырға батырсылыҡ итмәне. Башына төҙәп тағы ике тапҡыр атты. Бүренең аяҡтары һуҙылды, кәүҙәһе турайҙы. Ул тынып ҡалды. Нарат, уның үле икәненә тамам ышанғас ҡына, эте янына барып сүгәләне.

Этенең өҙгөләнеүен күреп, күҙенә йәш килгән малай ни эшләргә лә белмәне.

Бер аҙҙан Аҡтырнаҡ, күҙҙәрен мөлдөрәтеп, хужаһына текәлде. Башын күтәрмәксе булды, тик хәле етмәне. Шунан: «Ни эшләтәһең инде мине хәҙер?» — тигән төҫлө, малайға тыныс ҡына ҡарап ята башланы. Нараттың күҙҙәре йәшләнде, йөрәге һыҡраны. Майкаһын йыртып, этенең муйынындағы яраларын бәйләне. Унан этен, тунға урап, ҡосағына алды ла, саңғыһын кейеп, ҡайтырға сыҡты. Үлгән бүре ҡар өҫтөндә, ағастар араһында, ятып ҡалды.

Шул арала көн ҡараңғыланып өлгөргәйне инде. Нарат ашыға башланы. Тик этте күтәреп саңғы менән ҡар ярып барыуы ауыр ине. Ҡаратал моронона етәрәк, ул бөтөнләй арыны. Атлап барырлыҡ та рәте ҡалмағас, тунға ураған этен йомшаҡ ҡарға һалып, үҙе лә уның эргәһенә тәгәрәне. Саңғылары менән ағас төбөндәге ҡарҙы соҡоп, эте менән үҙе

һыйырлыҡ урын яһаны ла, тунына уранып, шунда кереп ултырҙы. Ҡар ҡыуышында этен ҡосаҡлап ултыра торғас, йоҡлап китеүен һиҙмәй ҙә ҡалды. Төн урталарында Әхмәтша бабай уны эҙләп килгәндә лә, ул этен ҡосаҡлаған килеш йоҡлап ята ине.
Ул «На-рат!» тип ҡысҡырған тауышҡа тертләп уянып китте, урынынан һикереп торҙо ла ике усын ауыҙына ҡуйып яуап ҡайтарҙы.

Атаһы янында Рауил менән Хәмзәне лә күргәс, малай түҙмәне, илап ебәрҙе. Шатлыҡтан да илай икән шул ҡайһы саҡта әҙәм балаһы...

## ҺАБАНТУЙ

Ауыл өҫтөндәге томан, осорға әҙерләнгән аҡкош һымаҡ ҡанаттарын йәйеп, бер урында туҡталып тора, тау артынан ҡыйыуһыҙ ғына күҙен ҡыҫып ҡараған ҡояш та алһыу керпектәрен тирә-йүнгә һибергә өлгөрмәгән. Әммә ауыл инде күптән уянған, урамдар ығы-зығы менән тулған: әле ярһыу аттарын саҡ тыйып тотҡан егеттәр сабып үтә, әле машиналар елдерә, әле малай-шалай йүгерешә. Нисә әйтһәң дә, бөгөн һабантуй булаһы көн бит Ҡушҡайын ауылында!

Һабантуй күңел асыу байрамы гына түгел. Унда элек- электән ир-егеттәр көс һынашҡан. Ат сабыштырыуҙа, көрәштә, һәр төрлө уйындарҙа еңеп сығыусылар дан алған тирә-йүндәге иң ҙур ауылдарҙан һаналған Ҡушҡайында инде борон-борондан һабантуйҙар шаулы уҙған. Ҡушҡайын көрәшселәрен бер кем дә бер ҡасан да еңә алмаған. Шул ғөрөф-ғәҙәт әле ошо көнгәсә һаҡланып килә. Әммә был һабантуйҙы хәүефле ҡаршыланы Ҡушҡайын кешеләре. Унық иң шәп көрәшсеһе Ғәлиәхмәт агай, бер ҙә көтөлмәгәндә йығылып, ҡулының быуынын сығарғайны.

Көрәш майҙанына иң элек Таулынан килгән Ишбулды сыҡты. Был көрәшсене Ҡушҡайын халҡының тәү күреүе ине, ул ситтә йөрөп ҡайтҡан булырға тейеш. Ай-Һай, мыҡты ла икән үҙе. Йөрәктау егетен дә, Ҡушҡайын егетен дә елгәреп кенә тороуын күргәс, комиссия ағзаларынан кемдер Ниғмәткә күҙ ҡыҫты. Әммә Ишбулды, бер аҙ алышҡандан һуң, Ниғмәтте лә тас салҡан күтәреп һалды.

Бына шулай, сит ауылдан килгән Ишбулды, бөгөнгө көрәштең бил бирмәҫ тәүге батыры булып, хөрмәтләнеп, еңеүсе урынын алды. Етмәһә, тал ошо саҡта ғына Олокүлдең элекке һабантуйҙарында тик Ғәлиәхмәт ағайҙан . ғына еңелә торған танылған көрәшсеһе — ир уртаһы Имаметдин баһадир, күкрәген кирә биреп, ҙур ҡара күҙҙәрен яндырып майҙанга сығып баҫты.

Имаметдин, арыу уҡ алышҡандан һуң, унық менән көрәшергә сыҡҡан егеттәрҙең икеһен дә еңеп, эре генә баҫып тора ине. Әммә оҙаҡ көтөргә тура килмәне. Өсөнсө көрәшсе — Хәлит етеҙ аҙымдар менән унық янына килде. Имаметдин башта юрамал ғына тотонғандай булһа ла, ҡарамаҡҡа әллә ни күренмәгән егеттең ҡулдарындағы ныҡлыҡты тойғас, йән-фарман алыша башланы.

Бына бер саҡ Имаметдиндең аяҡтары ерҙән айырылып һауала тыпырсынырға тотондо. Тылсымлы ерҙән айырылдыңмы, бөттөң инде. Күҙ асып йомғансы Хәлит- тең ыҡсым ҡулдары ғәйрәт менән Имаметдиндең баһадир кәүҙәһен башы аша ситкә бырағтырҙы. Майҙан ҡапыл гөжләп китте. Берәүҙәр ура ҡысҡырҙы, берәүҙәр шашып ҡул салты.

Тағы ике көрәшсене еңгәс, Хәлит тә батырҙар урынына ултырҙы.

Бына беренсе һәм икенсе урын өсөн көрәшкә инде Хәлит менән Ишбулды сыҡты. Бына-бына Ишбулдының имәндәй баҙыҡ беләктәре унық биленән ҡайырып алыр ҙа һауаға осорор кеүек тойолдо. Әммә барыбер ялҡынлы йәш көс

үҙенекен итте: бер мәлде, көтмәгәндә генә, Хәлит шундай оҫта, етеҙ хәрәкәттәр менән, уңға табан янтая биреп, Ишбулдының туптай тығыҙ кәүҙәһен йәлп иттереп ситкә алып ырғытты. Иҫ китмәле таҙа алым, бәхәсһеҙ еңеү майҙан халҡын таң ҡалдырҙы. Кемдәрҙер Хәлитте һауаға сөйөргә тотондо, кемдәрҙер уның ҡулын ҡыҫты, ҡосаҡланы. Кемдәрҙер: «Ҡушҡайын батырына дан!» — тип ҡысҡырҙы. Ә бер тын алған арала уның һул ҡулына «көрәштә еңеүсегә» тип яҙылған, исемләнгән сәғәт бәйләнеләр.

**10 класс**

*******

Төн. Башҡорт ҡыҙының тәңкәле еләне шикелле, күҙҙең яуын алып, йымылдап торған айыҙ күктә, алтын табаҡтай, тулған ай йөҙә. Таллыҡта һандуғастар сутылдаша. Тирәк башында кәкүк саҡыра. Күләүектә тәлмәрйендәр баҡылдаша. Оло Эйек йылғаһы, үҙенең мәңге шат, шаян йырҙарын һандуғас моңдарына мансып, ҡыуана-көлә, бер өҙлөкһөҙ сылтырап аға ла аға…

Ошондай шиғри картина менән башланып китә Зәйнәб Биишеваның «Яҡтыға» исемле трилогияһы. Иң элек ана шул гүзәл яҙғы төндәрҙең береһе, Оло Эйек буйында ултырған башҡорт ауылы, бәләкәс кенә, ләкин зирәк аҡыллы, яҡты күңелле Емеш һәм уның ата-әсәһе, туғандары менән танышып, беҙ инде артабан ҙур тарихи ваҡиғалар эсенә, революция һәм граждандар һуғышы дәүерендә халҡыбыҙҙың яҙмышын һәм көрәшен, ҙур уй-хыялдарын һәм ынтылыштарын һүрәтләгән образдар донъяһына инеп китәбеҙ. «Кәмһетелгәндәр», «Оло Эйек буйында», «Емеш» тигән романдарҙы берләштереүсе был киң ҡоласлы трилогияны кемдәр генә белмәй ҙә кемдәр генә яратып уҡымай! Трилогия ҙур талант эйәһе Зәйнәб Биишеваның башҡорт милли прозаһын үҫтереүгә индергән ҡиммәтле ижад емеше, ижад ҡаҙанышы булды.

**Эштәр:**

1.Текстҡа исем ҡушырға

2.Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәргә миҫалдар яҙырға

## СӘҒИТ АҒАЙ.

Ул саҡта Сәғит егерме бер йәшлек егет була. Ыҡсым буйлы, киң күкрәкле, ғәҙәттән тыш көслө Сәғиткә һоҡланмаған кеше юҡ ине. Һабантуйҙарҙа уны йыға алырлыҡ бәһлеүән булманы.

Бер ваҡыт, февраль аҙаҡтарында, байҙың, бына тигән йүгерек ат буласаҡ, тип ҙур өмөт бәйләп йөрөгән ҡырҡмышы юғалды. Сәғит уны ике көн эҙләне, ләкин таба алманы. Ҡышын ябыҡҡан бүреләрҙең был мәлдә саманан тыш усаллашыуҙарын Сәғит белә ине. «Шул ҡәһәр һуҡҡырҙар ашағандыр инде. Бына хәҙер ыҙғыш сығырын көт тә тор!» — тип уйланы егет.

Юғалған ҡырҡмышты, дөрөҫөрәге, уның һөйәктәрен һәм ҡыҙыл таҫма бәйләнгән ҡойроғон осраҡлы рәүештә бай үҙе тапҡан. Көтөүгә килеп, йәш көтөүсенән ҡырҡмыштың юғалыуын белгәс, бай бөтөнләй сығырынан сыҡты. **Алтынан үрелгән йыуан ҡамсы, башты уратып, төйөнлө осо менән Сәғиттең битенә батты.** Бите ауыртыуҙан түгел, бәлки йөрәк түҙә алмаған йәберҙән Сәғиттең күҙ алдары ҡараңғыланды, ун һигеҙ йәшкә сыҡҡаны бирле уға ҡул күтәрергә баҙнат иткән кеше юҡ ине әле.

Батрагының кем икәнен белгән бай ҡурҡып һыҙыу яғын ҡараны, ләкин Сәғиттең менгәне бай көтөүенең иң яҡшы айғыры ине, егет байҙы һә тигәнсе ҡыуып етте лә йоҙроғо менән уның сикәһенә яман ҡаты һуҡты. Бай, эһ тә итмәйенсә, эйәренән йығылып төштө, ә Сәғит, айғырын бороп, йылҡы көтөүенә ҡарай сапты.

Артабан Сәғит ағай улына дөрөҫөн әйтә алманы, ә дөрөҫө шулай булды: үлгән байҙы даланан таптылар, уның сикәһе йәнселгәйне.

**Эштәр:**

1.Ҡушма һөйләмгә миҫалдар яҙырға

2.Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ яһарға

**Изложение X класс**

## АТ САБЫШТЫРЫУ

Бына күптән көтөлгән көн килеп етте. Бөгөн һабантуй! Ундай-бындай ғына түгел, тирә-яҡта бик һирәк була торған — бик ҙурыһы, бик шәбе! Данлыҡлы сабыш- сылар йыйыла, атаҡлы көрәшселәр килә. Әллә ҡайҙағы тау эсендәге башҡорттар дан тотҡан сабышҡылары менән килгән. Араларында бер күк бейәне маҡтап һөйләйҙәр; үткән йыл Өфө ҡалаһында сабыштырғанда, бөтә аттарҙы әҙәм көлкөһөнә ҡалдырған, тиҙәр. Башҡаларын уйламайым да. Бына шул күк бейә мине ҡурҡыта.

Һабантуйға бер аҙна ҡалғас, атты бигерәк ныҡ ҡарай башланыҡ. Бесәндең ҡороһон ғына бирәбеҙ, бүлеп-бүлеп һоло һалабыҙ, аҙлап-аҙлап апара һыуы эсерәбеҙ.

Унһыҙ ҙа аҫыл һөйәк булған Алмасыбарым был арала ҡарап туйғыһыҙ булып сибәрләнде. Ял, ҡойроҡ ебәк-ләнеп, тулҡынланып тора. Эсе, ҡайыш менән тарттырылған кеүек, нәзегәйеп, тип-тигеҙ булып эскә керҙе. Буйы тағы ла оҙоная төшкән кеүек күренә. Аяҡ атлауҙа- ры шундай еңел инде, әйтерһең, ул ергә баҫмай, бәлки күҙгә күренмәй торған ҡанаттары менән осоп ҡына бара.

Беҙ Яңғыҙҡайынға барып еткәндә, аттарҙың күбеһе унда ине инде. Быларҙы күргәс, ҡаушап ҡалдым: бере-һенән-береһе һылыу, береһенән-береһе аҫыл малдар. Теге данлыҡлы күк бейә лә килеп етте. Күреүгә шунан күҙҙәремде алманым. Ғәжәп бер мал икән: ҡыҫҡа яллы, һирәк ҡойроҡло, сандыр кәүҙәле. Осаһы тар, арҡаһы бер аҙ бөкрөрәк. Әммә күкрәге бөтөнләй арыҫландыҡы — шундай киң, шундай ныҡ күренә. Теҙҙәре ике яҡҡараҡ китеп тора, бәкәлдәренә ҡарағас, тағы аптырап ҡалдым: улар шундай оҙондар ине, мин ғүмеремдә ундайҙы күргәнем юҡ. Күҙҙәре ҙур, уйнап, ялҡынланып тора. Уны бәләкәй генә ҡап-ҡара, башы бөтөнләй яланғас, ҡулына ҡамсы тотҡан бер башҡорт малайы менгән.

Бәләкәй генә булһа ла, күп сапҡан малайҙыр, ахыры: бер ҙә ҡаушамай, аттың холҡон белгәнгә оҡшай. Сабыш-ҡылар араһында иң тыныс торғаны ошо күк бейә ине. Аттар килеп бөттө. Беҙҙе Садиҡ ағай теҙә башланы. Теҙеп бөткәс:

— Берәү, икәү, өсәү! Һайҙи, туғандар! — тип ҡысҡырып та ебәрҙе. Ул «һайҙи»ҙың «һ»һен әйтеп бөтә алмағандыр, аттар, әйтерһең, ҡанатланып остолар.

Урындан ҡуҙғалыуға, беҙ — өс ат: мин, күк бейә, тағы ла бер ерән сабышҡы, бер-беребеҙгә бәрелә яҙып, йәнәшә оса инек.

Аяҡтар ергә тейәме, әллә аттар йәшерен ҡанаттары менән һауанан бараламы — әле лә айырып етә алмайым. Ағастар, йылғалар, ҙур-ҙур батҡаҡтар — алда, нисектер, күҙгә салынырға өлгөрә алмайҙар: беҙ уларҙы, йәшен кеүек, үтеп тә киткән булабыҙ.

Инде күк бейәгә атланған малай менән икәү генә ярышабыҙ. Көстәр тигеҙ: бер ваҡыт уның аты саҡ ҡына арттан бара, ләкин тағы ла бер ҡыуалай, минең аттың башы күк бейәнең ҡойроғо янында ҡала.

Батҡаҡлы йылғаны сыҡҡанда күк бейә минән 3-4 метрға алдан оса. Ғәйрәт менән бер тартам, йән асыуы менән уңға-һулға ҡамсы менән һуғам. Алмасыбарым күҙ асып йомғансы күк бейәнең алдына барып сыға.

Тағы ла бер тартып ебәрҙем, тағы бер бөтә ғәйрәтем менән уңлы-һуллы һуғам. Алмасыбар күк бейәне аршын самаһы артта ҡалдырып, майҙанға килеп тә керәбеҙ.

Донъя минеке ине. Бөтә тирә-яҡта дан тотҡан күк бейәне уҙып килеү Алмасыбар өсөн һис кемдең аҡылына килмәгән бер бәхет ине.

# МӨХӘББӘТ

Борон-борон заманда, күп йылдар артылышында булған, ти бер гүзәл ер. Атастар, ҡуйы урман булып, ҡояшты ҡаплар бейеклеккә еткән. Мәгрур ҡаялары, күкрәк киреп, был ожмах утрауын һалҡын елдәрҙән, әсе бурандарҙан һаҡлаған. Шишмәләре шундай саф, таҙа булган, ә тәме, шифаһы үлер сиккә еткән кешене лә аяҡҡа баҫтырған. Яландарҙа береһенән-береһе матурыраҡ, ал- һыуыраҡ хуш еҫле гөлдәр үҫкән. Сәскәнән сәскәгә хуш еҫле бал йыйып бал ҡорттары осҡан. Был матурлыҡҡа һоҡланып көнө-төнө һандуғас һайраган.

Ошо ерҙә бер егет йәшәгән. Үҙе уңған, төҫкә сибәр, буйға һомғол, көслө икән. Бейек тау баштарына менеп, бөркөттәрҙең осоуын күҙәткән, күкрәк тултырып йырлаған. Уҡ-Һаҙағын тотоп, урман-яландарҙы гиҙгән, һунарсылыҡ иткән. Хәлдән тайып сарсағанда, ятып шишмәләрҙән һыу эскән.

Ләкин ни genә эшләһә лә, нимәгә генә тотонһа ла, күңеле болоҡһоп тик торған, ниҙер етмәгән, күңеле ҡайҙалыр саҡырған, өмөтләндергән. Ул ошо мөғжизәне эҙләп, бар ерҙе ҡыҙырған, тыуған еренән алыҫайғандан- алыҫая барған. Көм түҙмәгән егет, бер көн хәлдән тайғас, күккә ҡарап мөрәжәғәт иткән: «Эй, Ҡояш-әсәм! Тыңласы минең һүҙемде, ярҙам итсе?! Хәлем бик һәйбәттән түгел. Көндән-көн һарғаямын, кибәмен. Бар сер йомғағын йыйған билдәһеҙ ҡошто таба алмайым. Кем ул? Нимә булды минең менән?»

«Эй, балам, балам! Мөхәббәтһеҙ кеше йәшәмәй тигәндәре дөрөҫ икән. Ниндәй генә йән эйәһе булһа ла, парлы булырға тейеш. Ана ҡоштарға ғына ҡара, нисек күңелле һайрайҙар. Э һин бер үҙең, янында һинең күңелеңде иш итерҙәй кешең юҡ — шуға ауыр. Ярҙам итәм мин һиңә, улым. Үҙемдең баламды — ҡыҙымды бирәм. Тик шартымды ғына тыңла: бер ҡасан да уга ауыр һүҙ әйтмә, ауыр ваҡыттарҙа ла ҡул күтәрмә. Сөнки ул — илаһи зат. Һине яратыр, һиңә бәхет бирер өсөн тыуған ул. Усаҡ йылыһын да һаҡлаусы, киләсәгеңде дауам иттереп йәм биреүсе лә ул буласаҡ. Күп нәмә һинән торасаҡ. Йәберләмә, ишеттеңме, һәр саҡ ихтирам ит!»

Ошо һүҙҙәрҙе әйткән дә Ҡояш-әсә ергә алтын уҡтарын йүнәлткән. Егет был тиклем дә яҡтылыҡҡа күҙҙәрен йомған. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң күҙен асып ҡарай ҙа хайран ҡала. Алдында тал сыбығылай зифа буйлы, оҙон ҡара сәсле, ҡарлуғас осошон хәтерләткән ҡашлы, бешкән муйыл төҫөндәге ҡара күҙле һылыу ҡыҙ баҫып тора. Тыйнаҡ ҡына йылмая ла: «Һаумы, егет кеше! Мин һинең хәләл ефетең булам! Ауыр саҡтарҙа ярҙам итеүсе, бейеклектәргә этәреүсе, яҡшы эштәргә өндәүсе мин булырмын», — ти ул.

Ә егет ҡыҙға ҡарап, күҙен дә ала алмай тора, ти. Ҡараңғы төндәрҙә йондоҙҙар киңлегендә эҙләгән, ялан- ҡырҙарҙа тапмаған, һунар ваҡытында атмаған мөғжизәнең ошо икәнен аңлаған. Бәм шул көндән башлап Егет менән Ҡыҙ бик бәхетле, татыу йәшәй башлағандар. Үҙҙәре кеүек уңған, тырыш, матур балалар үҫтергәндәр.

— Оҡшанымы әкиәт? — Өләсәйем яратҡан һорауын биреп ҡуйҙы.

**11 класс**

**ҠАҺАРМАНЛЫҠТЫ ДАНЛАУСЫ ҠОБАЙЫР.**

**«Аҡбуҙат»** — башҡорт эпосының алтын фондына ингән героик ҡобайырҙарҙың береһе. Башҡорт халҡының һоҡланғыс хыялы, һәләте менән быуаттар төпкөлөндә ижад ителгән был ҡобайыр бөгөнгө көндә лә, телдән телгә күсеп, быуындан быуынға тапшырылып, боронғоларҙан ҡалған аманат булып йәшәүен дауам итә. **Уны ижад итеүҙә һәм беҙҙең көндәргә тиклем һаҡлап килеүҙә халыҡ сәсәндәре мөһим роль уйнағандар.**

Әҫәрҙең ҙур **оҫталыҡ** менән замандың иң алдынғы идеалдарын алға һөрөүе, кеше көсөнөң тәбиғәт көстәренән өҫтөнлөгөн, **ғәҙеллектең** тантана итеүен раҫлауы, илһөйәрлеккә өйрәтеүе, башҡорттарҙың **тормош-көнкүрешен**, йолаларын сағылдырыуы уның популяр булыуына киң юл асҡан. Эпик ижад өсөн ижтимағи әһәмиәтендәге темаларҙы күтәреү, халыҡ тормошондағы мөһим ваҡиғаларҙы, образдарҙы һүрәтләүҙә уға масштаблылыҡ, күп планлылыҡ хас.

Сәсәндәрҙең ҡобайырсылыҡ традицияһында башҡорт халҡының поэтик тарихын монументаль эпопеяларҙа һүрәтләүгә ынтылыу тенденцияһы булған. Улар, төп герой быуындарының билдәле бер эҙмә-эҙлелеген һаҡлап, айырым циклдан торған ҡобайырҙар ижад иткәндәр. Мәҫәлән, Урал батыр, уның улдары һәм ейәндәре хаҡында «Урал батыр», «Иҙел менән Яйыҡ», «Аҡбуҙат» **кобайырҙары** барлыҡҡа килгән.

**Эштәр:**

1.Билдәләнгән һүҙҙәрҙе яһалышы яғынан төрөн яҙырға (тамыр, яһалма, ҡушма)

2. Билдәләнгән һөйләмгә синтаксик анализ эшләргә

## ТӨРЛӨ ДУҪТАР БУЛА.

Һәр кемдең дуҫтары була һәм төрлө дуҫтары була: һүҙ күтәреүселәре һәм юҡҡа ҡыҙрасланыусылары ла; ҡолон муйынына аҫҡан ҡыңғырау һымаҡ шалтырауыҡтары һәм онотолғанда бер генә йылмая торғандары ла; хәтереңде һаҡлап тормай, бәреп әйтеүселәре һәм, күңелеңде китмәҫ өсөн, гел комплименттар ғына һибеүселәре лә; һинең менән утҡа-һыуға инерлектәре һәм, һин батҡанда, яр башында, башын ҡырын һалып, ҡарап торғандары ла, һинең өсөн иң ғәзиз нәмәһе — йәнен бирерлектәре һәм, үҙенә кәрәк саҡта, йәнеңде тартып алырлыҡтары ла, һинең шатлығыңды үҙ шатлығы, һинең уңыштарҙы үҙ уңышы итеп һөйөнөүселәре һәм, эстән генә әрнеп, көйөнөүселәре лә була.

Төрлө дуҫтар була донъяла. Ләкин уларҙың күбеһен башыңа ҡайғы төшкәндә генә аңлайһың икән.

Ҡапыл, аяҙ көндө йәшен һуҡҡан кеүек, йөрәк сире мине аяҡтан йыҡты. Дуҫтарымдың күбеһе быны белмәне, ә ҡайһы берәүҙәре белмәмешкә һалышып, урамдың икенсе яғына янтайҙы. Күптән күрешмәгән дуҫым, ялын, Ҡара диңгеҙ буйын ташлап, яныма осоп ҡайтты. Аҙнаға яҡын карауатым эргәһенән китмәне. Юҡ, йәлләмәне ул мине. «Бөгөлмә. Бөгөлгәнде тағы ла нығыраҡ бөгәләр, ә аҙаҡ һындыралар», — тине ул һәм икенсе көндө осоп та китте.

Башҡа ваҡытта, күңел күгем ҡояшлы саҡта, йөрәгем тыныс һәм талғын типкәндә, эштәрем алға киткәндә, ул ана шулай юғала ла ҡуя. Төрлө дуҫтар була донъяла...

**Эштәр:**

1.Тиң киҫәктәрҙе табып, аҫтына һыҙырға.

2.Ҡалын хәрефтәр менән яҙылған һөйләмдең төрөн билдәләргә

## Изложение XI класс
## КИЛЕН ТӨШӨРӨҮ

...Заһит кәләшен алып ҡайтты. Ауылда был хәбәр тиҙ таралды. Туған-тыумасаның ҡыҙҙары ун ете йәшлек еңгәләрен күрергә ашыҡты. Ҡыҙҙар оялышып ҡына соланда тора. Ләкин күҙҙәре шаршау артында ултырған йәш еңгәгә төбәлгән.

Сафураның ҡәйнәһе Йомай әбей өйгә бер инде, бер сыҡты. Өлкән килененә сәй ҡайнатырға, кәлсә бешерергә ҡушты. Әҙерләп ҡуйған монпаси, әсмүхә сәйен алды.

Шул саҡ ейәнсәре Зәлифә килеп инде. Өләсәһе уны орошорға тотондо.

- Ниңә оҙаҡланың? Баянан бирле һине көтәбеҙ. Еңгәңә һыу башлатырға кәрәк.

Зәлифә йәш еңгәһе менән барып күреште. Шаулап ҡыҙҙарҙы йыйҙы. Силәк-көйәнтә әҙерләне. Өләсәһе уга йоланы ҡат-ҡат ҡабатлап, һөйләнде:

- Еңгәңде уртаға алығыҙ. Һыулы көйәнтәне уң яҡ яурынына күтәрт. Шул саҡта «төклө аяғың менән, ырыҫлы бул» тип теләк телә. Ҡайтҡанда ҡабаланмағыҙ. Лабырлап һөйләшеп, ҡысҡырып көлөшмәгеҙ. Ипле генә йөрөгөҙ. Ҡайтып һыуын ҡуйғанда еңгәндең билбауын сисерһең. Шунан сәй әсербеҙ, йөҙөк өләшербеҙ.

Ҡыҙҙар Сафураны уртаға алды. Зәлифә көйәнтә менән алдан атланы. Ҡыҙҙар ауылдан сығып, һыу буйына китте.

Сафура әҙерәк кенә битен асты. Ҡыҙҙар ҡолаҡтан ҡолаҡҡа шыбырлашты:

- Еңгәм ҡайһылай матур.

- Бите ап-аҡ. Ҡашы ҡыйылып тора. Ҡалай ҡупшы атлай.

- Эйе шул. Ауыҙы бәләкәс кенә.

Сафура ла уларҙы һаҡ ҡына күҙәтте.

Һыуға еттеләр. Зәлифә өләсәһе әйткәнде теүәл үтәргә тырышты.

Сафура, һыуҙың тамсыһын да сайпылтмай, ҡыҙҙар уртаһында әйгә ҡайтты.

Зәлифә еңгәһенең билбауын систе, бүләкте үҙенә алды. Ҡыҙҙарҙы сәйгә ултырттылар. Йомай әбей Сафура килтергән йөҙөктәрҙе ҡыҙҙарға таратты.

# МИХАСЬ

...Һуғыштың тәүге осоро. Мине, ауыр яраланған һалдатты, партизандар, дошман тылынан табып, үҙ лагерҙарына алып ҡайтты.

Еүеш землянкала мине партизандар фельдшеры ҡарай. Ул дарыу менән дә, йылы һүҙҙәре, яҡты өмөттәре менән дә дауалай.

Әгәр ҙә ун өс йәшлек партизан малай Михась булмаһа, моғайын, был землянкала бик оҙаҡ ятҡан булыр инем. Әлеге землянкаға мине килтергәндең икенсе көнөндә әкрен генә, һаҡ ҡына атлай керҙе лә ул минең эргәлә торған бүкәнгә ултырҙы. Малайҙың сәстәре етен кеүек аҡһыл, ә күҙҙәре етен сәскәһе төҫлө. Төймәләй генә танау осо өҫкә сөйөлгән, ҡалын ирендәре алһыуланып тора. Миңә ул ҡыҙыҡһынып та, ҡыҙғанып та ҡарай.

— Мин скрипкала уйнай беләм, — тине ул ҡапыл балаларға хас бер ҡатлылыҡ менән. — Теләһәгеҙ, һеҙгә лә берәй көй уйнап күрһәтәм. Уйнайыммы?

Ризалығымды белдереп, башымды һелктем.

Михась Степан Разин тураһындағы көйҙө уйнай башланы. Йөрәктән сыҡҡан моң ағылды. Землянкаға бер партизан, уның артынан икенсеһе, өсөнсөһө, дүртенсеһе керҙе. Шым ғына керәләр ҙә ҡайҙа етте шунда урынлашалар. Бөтәһе лә Михастың уйнауын тыңлайҙар.

Бер көй икенсеһе менән алмашына торҙо. Михась йә оҙон, һағышлы көйҙәрҙе уйнай, йә ҡыҫҡа, шаян көйҙәр менән тыңлаусыларҙың күңелдәрен дәртләндерә. Ул быларҙың бөтәһен дә ысын күңелдән башҡара. Эске яныу менән ысын таланты булған һәм музыкаға ысын-ысындан ғашиҡ кеше генә шулай уйнай ала.

Михась, башын ҡыйшайтып, сикәһен скрипкаға терәй ҙә уйнауын ғына белә. Михастың йырҙары беҙҙең Тыуған илгә булған ҡайнар мөхәббәттәрҙе көсәйтә, дошманға булған нәфрәтебеҙҙе тағы ла арттыра. Нәҙек кенә кәүҙәле, мөләйем йөҙлө, иркә ҡарашлы был баланың ошондай аяуһыҙ һуғыш шарттарында ҙурҙар менән бергә көрәшеп йөрөүен күреү үҙе генә лә беҙҙең нәфрәтте унлата арттыра ине.

Михась яҡшы музыкант ҡына түгел, бик яҡшы разведчик та булды. Ниндәйҙер сәбәп менән разведкаға ҙурҙарҙы ебәреп булмағанда, гел Михась китә торғайны.

Михась йәшәүҙе иҫ киткес яратты, һуғышта үлеп ҡалыу тураһындағы уй башына ла кереп сыҡманы. Шуға күрә лә ул, һуғыш бөткәс музыка мәктәбендә, аҙаҡ консерваторияла уҡыясағына аҙ ғына ла шикләнмәне.

Ләкин Михась был бәхетле көндәргә тиклем йәшәй алманы шул...

Фашистар беҙҙең өҫкә саранча кеүек ябырылды, улар һан яғынан беҙҙең группанан бер нисә мәртәбә күберәк ине. Дошман беҙҙе бөтә яҡтан уратып алырға өлгөрҙө. Беҙ ут балдағы эсендә ҡалдыҡ, уны өҙөп сығыу өсөн, атакаға

ташландыҡ. Беренсе атакала уҡ ике иптәшебеҙ сафтан сыҡты. Балдаҡ һаман тыгыҙыраҡ ҡыҫылды. Был йәһәннәмдән ҡотолоу мөмкин түгел кеүек тойолдо. Шулай ҙа барлыҡ көсөмдө йыйҙым да, тынып ҡалған пулемет янына барып, дошманға ҡаршы ут астым.

Ҡапыл... Был ни ғәжәп?! Беҙ музыка тауышы ишеттек! Скрипка тауышы! Скрипкала Михась уйнай ине... Уның ниндәй көй уйнауын хәтерләй алмайым. Беҙҙең уттай янган йөрәктәргә яңы ҡан өҫтәлгәндәй булды. Рух күтәрелде, йәшәгебеҙ килеп китте. Дошман юҡ ителергә, ә беҙ йәшәргә тейеш. Бына ниндәй көс бирҙе беҙгә Михастың уйнауы!

Ошондай үлемесле мәлдә музыка ишеткәс, немецтар ҙа аптырашып, бер минутҡа юғалып ҡалды. Беҙҙең өсөн ошо бер минут етте: беҙ ата-ата алга ынтылдыҡ. Командир Михасты ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырҙы ла беҙҙең менән бергә йүгерҙе. Тик ҡапыл Михастың йөрәк өҙгөс тауышы ишетелде, һәм беҙ уның башы, хәлһеҙләнеп, аҫҡа һалынып төшкәнен күрҙек. Дошман пуляһы уның ғүмерен өҙгәйне...

Михастың үлеме беҙгә бөтәһенән дә ауырыраҡ булды. Һөйөклө ҡустыбыҙ, йәш герой-партизая, ҡыйыу разведчик һәм талантлы музыкант Михась Тыуған ил өсөн бына шулай ҡорбан булды.